Муниципальное общеобразовательное бюджетное учреждение
средняя общеобразовательная школа д.Константиновка
муниципального района Кармаскалинский район Республики Башкортостан

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДАЮ |
|---|---|---|
| на заседании ШМО | Зам. директора по УВР | Директор школы |
| ________ Рук.ШМО | ________ Назырова И.Р. | ________ Биккузин И.М. |
| Протокол №1 | | Приказ № 250 от 30.08.2016г. |
| от 29.08.2016г. | | |

Рабочая программа

по башкирскому языку

2-4 классы

1. Х.А.Тулумбаев, М.С.Давлетшина «Башкирский язык», для учащихся 2-го класса русских школ, изучающих башкирский язык первый год
2. Х.А.Тулумбаев, М.С.Давлетшина «Башкирский язык», для учащихся 3 кл., 4 кл. русскоязычных школ
3. Примерная программа по башкирскому языку для школ, где обучение ведется на русском языке.

Срок освоения: 4 года

Составила учитель
башкирского языка
I категории

Сагитова Гузалия Ринатовна

д. Константиновка

**Башланғыс мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүҙең <u>шәхсән</u> һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә:**

- тел кешелерҙең аралашыу сараһы икәнде аңлау, үҙләштереү;
- башҡорт телен милли мәҙәниәттең бер күренеше тип ҡабул итеү;
- дөрөҫ һөйләү теле һәм яҙма тел кешенең индивидуаль мәҙәнилеге күрһәткесе;
- үҙ телмәренә иғтибарлы булып үҙ- үҙен баһалау һәләтлелеген үҫтереү.

**Башланғыс мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүҙең <u>предмет-ара</u> һөҙөмтәләре булып түбәндәгеләр тора:**

- белем алыу (уҡыу-уҡытыу) бурыстарын хәл итеү өсөн төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәт табыу маҡсатында, телде ҡуллана белеү оҫталығы;
- аралашыуҙың маҡсаты, бурысы, сараһы, тел шарттарында ориентирлашыу;
- телмәрҙе һәм аралашыу ситуацияһын иҫәпкә алып, коммуникатив бурыстары (диалог, монологик телмәр, яҙма текстар) уңышлы атҡарыу маҡсатында, адекват телмәр сараларын һайлап ала белеү;
- үҙ фекеренде һәм позициянды мөмкин тиклем теүәл итеп аңлатырға ынтылыу;
- һорауҙар биреү оҫталығы;
- башҡорт әҙәби теле нормалары (орфоэпик, лексик, грамматик) һәм телмәр этикеты ҡағиҙәләре тураһында башланғыс төшөнсәне алыу;
- орфографик ҡағиҙәләрҙе һәм тыныш билдәләрен (өйрәнелгән күләмдә) ҡуйыу ҡағиҙәләрен белеү;
- өн, хәреф, һүҙ өлөшө, телмәр киҫәге, һөйләм киҫәге, ябай һөйләм кеүек тел берәмектәрен таба, сағыштыра, классификациялай (бүлә), ҡылыҡһырлай (характеристика бирә) алыу оҫталығы;
- телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

аудирование һәм уҡыу:

- телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлүмәтте адекват ҡабул итеү;
- төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу, төрлө стилдәге, жанрҙағы тексты үҙләштереү;
- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге; төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәләрен булдырыу;
- һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү;уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу;мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү.
- стилистик үҙенсәлектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу.

һөйләү һәм яҙыу:

- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең маҡсатын билдәләү һәләтлелеге, хәрәкәттең эҙмә-эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;
- тыңланған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә һөйләй алыу;
- төрлө стилдә һәм жанрҙа, адресланыуға ҡарап һәм аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;
- телдән һәм яҙма формала үҙ фекеренде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә-эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;

- төрлө төрҙәге монологты һәм диалог үҙләштереү;
- телмәр этикет нормаларын һаҡлап аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;
- уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ телмәреңде контролдә тотоу;
- үҙ тыңдаштәрең аудиторияһында ҙур булмаған доклад, реферат менән сығыш яһау;
- алынған белемде һәм ккүнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү, тел күренештәрен анализлау буйынса алған белем һәм күнекмәләрҙе предмет-ара ҡулланыу;
- аралашыу процесында тирә-яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуцияларҙа телмәр этикетының милли-мәҙәни нормаларын үҙләштереү.

Башланғыс мәктәптә башҡорт телен өйрәнеүҙең <u>предмет</u> һөҙөмтәләренә түбәндәгеләр инә:

1. телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында , тел һәм халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, туған телдең кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;
2. гуманитар фәндәр системаһында туған телдең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;
3. туған тел тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;
4. тел ғилеменең төп аңлатмалары:лингвистика һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми-эшлекле стилдәр, матур әҙәбиәт теле;функциональ-мәғәнәүи телмәр төрҙәре; телдең төп берәмектәре, уларҙың билдәләре һәм телмәрҙә ҡулланыу үҙенсәлектәрен үҙләштереү.
5. Башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;
6. Телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәмектәрен аралашыу шарттарында ярашлы ҡулланыу;
7. Һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен, һөйләм һәм һүҙбәйләнешкә синтаксик анализ, төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;
8. Тел һүрәтләү саралары һәм уларҙы уҡыусы телмәрендә ҡулланыу;
9. Туған телдең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

Башланғыс класс уҡыусыларын башҡорт теленә өйрәтеүҙә түбәндәге бурыстар ҡуйыла:

- Тәҡдим ителгән темалар буйынса балаларҙың һүҙлек запасын арттырыу, телмәр күнекмәләрен камиллаштырыу.
- Ситуациялар, темалар буйынса һорауҙар биреү, шул һорауҙарға һүрәт, картина, текст нигеҙендә һәм ижади яуап бирә белеү.
- Темаға тап килгән шиғырҙар ятлау, йырҙар өйрәнеү,уйындар өйрәнеү, телмәр төҙөү иғтибарға алына.

- Әйтелеше ҡатмарлы булмаған һүҙҙәрҙе, ябай һөйләмдәрҙе тәүҙә күсереп, шунан яттан яҙыу.
- Һәр тема буйынса эш барышында тыуған Республика менән танышыуҙы дауам итеү, башҡорт халкына, тарихына, Башҡортостан тәбиғәтенә, сәнғәтенә, әҙәбиәтенә ихтирам тәрбиәләү.

Уҡыу йылы аҙағында башланғыс класс укыусылары түбәндәге белем һәм күнекмәләргә эйә булырға тейеш:

1. Һөйләгәнде йәки уҡығанды аңлай алыу (аудирование):
– укытыусының, иптәшенең һөйләгәнен, укығанын аңлай алыу;
– иҫәнләшеү, һаубуллашыу, рәхмәт әйтеү, ғәфү үтенеү, үтенесте белдереү, рөхсәт һорау (телмәр этикеты);
– текстың йөкмәткеһе, ситуация буйынса һорау биреү.
2. Уҡыған текст буйынса, күҙәтеүҙәр нигеҙендә һөйләй белеү, ситуацияға ярашлы һөйләшеү (говорение):
– бәләкәй күләмле текстың йөкмәткеһен һөйләү,
– һүҙлек һүҙҙәрен белеү, уларҙы дөрөҫ ҡулланып һөйләү,
– диалог төҙөү, төркөмдәрҙә һөйләшеү,
– үҙең, ғаилә ағзалары, уларҙың исемдәрен белеү, һөнәр-шөғөлдәре, туғанлыҡ мөнәсәбәте һ.б. тураһында һөйләү,
– ваҡиғаға, персонажға үҙ мөнәсәбәтеңде әйтеп биреү,
– башҡорт теленән руссаға һәм киреһенсә тәржемә итеү.
3. Уҡыу (чтение):
– тексты дөрөҫ, шыма, талғын укыу (орфоэпик нормалар нигеҙендә),
– поэтик әҫәрҙәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу,
– уҡыған текстың йөкмәткеһен билдәләй алыу, персонаждарын әйтеү,
– текстан һорауҙарға яуаптар табыу, укып күрһәтеү.
4. Яҙыу (письмо):
– хәрефтәрҙе матур, дөрөҫ, тейешле кимәлдә тоташтырып яҙыу,
– ҙур булмаған тексты күсереп яҙыу,
– шундай уҡ текст буйынса йә картина нигеҙендә 2-3 һорауға яуап яҙыу,
– бирелгән ситуация буйынса 2-3 һөйләмдән торған текст яҙыу,
– ныҡлы әҙерлектән һуң өйрәтеү характерындағы диктант яҙыу (программала күрһәтелгән нормалар күләмендә)

Тыңлау.
Телдең, аралашыуҙың максатына һәм ситуацияһына төшөнөү. Яңғырап торған телмәрҙе адекват kабул итеү. Бирелгән текстағы мәғлүмәтте тыңлағанда аңлау, текстың төп фекерен билдәләү, унын йөкметкеһен һорауҙар ярҙамында биреү.
Һөйләү.
Коммуникатив бурысты эффектлы хәл итеү өсөн, аралашыуҙың максаттарына һәм шарттарына ярашлы тел сараларын һайлау. Телмәрҙең диалог функцияһына ғәмәлдә эйә булыу. Һөйлешеүҙе башлау, ҡеүәтләү, тамамлау, кемдеңдер иғтибарын йәлеп итеү оҫталығына эйә булыу һ .б. уkытыу бурыстарына яраkлы (тасуирлау, хикәйәләү, фекерләү) телдән монологик һөйләй алыу оҫталығына эйә булыу. Укытыу һәм көнкүреш

ситуацияһында (сәләмләү, хушлашыу, ғәфү үтенеү, рәхмәт әйтеү, үтенес менән мөрәжәғәт итеү) телмәр этикеты нормаларына эйә булыу. Орфоэпик нормаларҙы һәм дөрөҫ интонацияны үтәү.

Уҡыу.

Уҡыу өсөн тәҡдим ителгән тексты аңлау. Тейешле материалды табыу маҡсатында һайлап алып уҡыу. Текста бирелгән мәғлүмәтте табыу. Күҙгә күренгән текста тупланған мәғлүмәт буйынса ябай һығымталар яһау. Текст йөкмәткеһендә тупланған мәғлүмәтте дөйөмләштереү. Һүҙҙәрҙе , һүҙбәйләнештәрҙе, һөйләмдәрҙе һәм ҡыҫҡа текстарҙы аңлап уҡыу. Өндәү билдәләренә ярашлы интонация һәм паузалар менән уҡыу. бәләкәй шиғырҙарҙы аңлау. Һүҙҙе тотош уҡыуға күскән осорҙа орфоэпик уҡыу менән танышыу. Орфографик уҡыу (шыбырлап ижекләп әйтеү) – әйтеп яҙҙырғанда һәм күсереп яҙғанда үҙ контроль сараһы.

Яҙыу.

Грамотаға өйрәтеү системаһында хәреф, хәрефтәр бәйләнешен, ижектәрҙе, һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе яҙыу. Яҙыу төрө кеүек уҡытыу эшмәкәрлегенә тура килгән гигиеник талаптарҙы үтеп, аңлайышлы, бөхтә яҙырға өйрәтеү. Өйрәнелгән ҡағиҙәләргә тап килтереп күсереп яҙыу, әйтеп яҙҙырыу. Тыңланылған һәм ентекле, һайланма уҡылған тексты теҙеп яҙа алыу (изложение). Балаларға ҡыҙыҡлы темалар буйынса үҙҙәренең кескәй текстарын төҙөтөү.

Яҙыуға ҡарата гигиеник талаптарҙы үҙләштереү. Бармаҡтарҙың ваҡ моторикаһын һәм ҡулдарҙың хәрәкәт азатлығын үҫтереү. Дәфтәр бите һәм класс таҡтаһы арауығында дөрөҫ ориентация осталығын үҫтереү, ҙур һәм бәләкәй яҙма хәрефтәрҙе яҙыуҙы үҙләштереү.

Хәрефтәрҙе, хәрефтәр бәйләнешен (буквосочетание) , ижектерҙе, һүҙҙәрҙе, һөйләмдәрҙе гигиеник нормаға ярашлы яҙыу. Аңлайышлы һәм ыҡсым яҙырға өйрәнеү. Әйтелеше менән яҙылышы айырылмаған һүҙҙәрҙе һәм һөйләмдерҙе әйтеп яҙҙырыу (диктант). Тексты дөрөҫ күсереп яҙыу алымдарын һәм тәртибен өйрәтеү.

Һүҙ һәм һөйләм.

Һүҙҙе өйрәнеү объекты, анализлау материалы итеп ҡабул итеү. Һүҙҙәрҙең мәғәнәһен аңлау буйынса күҙәтеүҙәр ойоштороу. Һүҙ һәм һөйләмде айырыу. Һөйләм менән эшләү.

Орфография. Дөрөҫ яҙыу ҡағиҙәләре һәм уларҙы ҡулланыу менән танышыу.

- һөйләм башында, яңғыҙлыҡ исемдәрҙә баш хәреф;
- һүҙҙәрҙе айырып яҙыу;
- һүҙҙәрҙе ижекләп юлдан юлға дөрөҫ күсереү;
- һөйләм аҙағында тыныш билдәләре.

Уҡыу предметының йөкмәткеһе.

**2 класс**

**Тыуған Башҡортостан**

Был тема башҡортса белмәгән балаларға үzzәре йәшәгән Башҡортостандың ҡалалары һәм ауылдары, йылғалары һәм күлдәре, ғөмүмән, Башҡортостан, уның халҡы, тарихы тураһында мәғлүмәт биреүгә бағышлана. БР символикаһы ла искә алына.

**Башҡорт теле**

Башkорт теленеn он hем херефтерен танып яzа белерге ойретеу.
Башkорт телендә hөйләшеү, аралашыу, укыу, яzыу өсөн, балаларzың билдәле кимәлдә hүzлек запасы булырға тейеш.

**Һаумы, мәктәп!**

Бөтә балалар өсөн ҙур байрам – 1 сентябрь, уҡыу, йәйге каникул, белем көнө, класс, ундағы уҡыусылар, уларҙың эштәре тураһында hөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт теленең өндәре hәм хәрефтәре (ҡабатлау). Темаға ҡараған hүҙ байлығын арттырыу. Бәйләнешле телмәр үҫтереү.

**Тән өлөштәре.**

Кешенең организмы, тән өлөштәре атамаларын үzләштереү. Тәнде таzа тотоу, hаулыkты hаklау. Зат ялғауzарын, эйәлек алмаштарын hәм ялғауzарын практик kулланыу. Өндәрzең сиратлашыуы.
Дәреслектәге күнегеү текстары, диалогтар, йомаkтар.
Ә.Вәхитова. Дарыу бирә.
Ш.Ғәлиев. Тешем.
К.Ушинский. Дарыу.

**Минең ғаиләм**

Үzенең ғаиләhе, ғаилә ағzалары, улраzың эштәре, hөнәре, уларға туғанлыk мөнәсәбәте, ғаилә шәжәрәhе, файzалы эштәр тураhында hөйләшеү.башkорт телендә эйәлек ялғауzарын, килеш ялғауzарын практик үzләштереү. Тиң кисәкле hөйләмдәр менән практик эштәр.

**Мин нимә яратам**

Уйынсыk исемдәре, уйынсыkтарzың билдәләре, уйындар. Башkорт телендә kалын hәм нәzек ялғауzар. Килеш hәм зат ялғауzарын практик kулланыу.
Диалогтар, күнегеү текстары.
Гәзит-журналдарzан уkыусылар hайлаған текстар.
Ф.Рәхимғолова Шауламағыz.

**Минең мәктәбем**

Балаларzың үzzәре уkыған мәктәп, уның үzенсәлекле билдәләрен, урынлашыуын, кабинеттарын, дәрестәрzе белеүе. Улар тураhында hөйләү. Башkорт теленең өндәре. Һүzzәрҙең предметты, билдәне, эште белдереүе.

**Минең класым.**

Балаларzың үzzәре уkыған класс, уның үzенсәлекле билдәләрен, урынлашыуын, дәрестәрzе белеүе. Улар тураhында hөйләү. Башkорт теленең өндәре. Һүzzәрҙең предметты, билдәне, эште белдереүе.

**Мин мәктәпкә йыйынам.**

Уҡыусыларҙың тема буйынса белемдәрен тәрәнәйтеү, һүҙлек запасын арттырыу. Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы, таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек, иман тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт телендә өндәрҙең, хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы.

**Мин мәктәптә.**

Балаларzың үzzәре уkыған мәктәп, уның үzенсәлекле билдәләрен, урынлашыуын, кабинеттарын, дәрестәрzе белеүе. Улар тураһында һөйләү. Башkорт теленең өндәре. Һүzzәрҙең предметты, билдәне, эште белдереүе.

**Мин дәрестән сыҡтым.**

Балаларzың үzzәре уkыған мәктәп, уның үzенсәлекле билдәләрен, урынлашыуын, кабинеттарын, дәрестәрzе белеүе. Улар тураһында һөйләү. Башkорт теленең өндәре. Һүzzәрҙең предметты, билдәне, эште белдереүе.

**Минең уйынсыҡтарым.**

Уйынсыk исемдәре, уйынсыkтарzың билдәләре, уйындар. Башkорт телендә kалын һәм нәzек ялғауzар. Килеш һәм зат ялғауzарын практик kулланыу.
Диалогтар, күнегеү текстары.
Гәзит-журналдарzан уkыусылар һайлаған текстар.

**Мин уйнарға яратам.**

Уйынсыk исемдәре, уйынсыkтарzың билдәләре, уйындар. Башkорт телендә kалын һәм нәzек ялғауzар. Килеш һәм зат ялғауzарын практик kулланыу.
Диалогтар, күнегеү текстары.

**Мин уйнарға сығам.**

Уkыусының көн тәртибе, ул тәртипте һаklау, бөхтәлек, йыйнаklыk тураһында мәғлүмәттәр. Һәйбәт сифаттар тәрбиәләү. Башkорт теленең өндәре, хәрефтәре, һүzzәргә ялғауzар kушыу, һөйләмдә һүzzәр тәртибе.
Диалогтар, мәkәлдәр, күнегеү текстары, көләмәстәр.

**Мин уйнарға сыҡтым.**

Уkыусының көн тәртибе, ул тәртипте һаklау, бөхтәлек, йыйнаklыk тураһында мәғлүмәттәр. Һәйбәт сифаттар тәрбиәләү. Башkорт теленең өндәре, хәрефтәре, һүzzәргә ялғауzар kушыу, һөйләмдә һүzzәр тәртибе.
Диалогтар, мәkәлдәр, күнегеү текстары, көләмәстәр.

**Минең кескәй дуҫтарым.**

Йорт хайуандарының һм ҡоштарының аңлатмаларын үҙләштереү. Уларҙың файҙаһы, йәшәү урындары, үҙенсәлектәре менән танышыу. А.Игебаевтың “Аҡтүш” шиғырын, тема буйынса текстар өйрәнеү.
Үҙаллылыҡ һәм дуҫтарына ҡарата хөрмәтләү хисе тәрбиәләү.

Уҡыусыларҙың дәрестән тыш булған эштәре тураһында һөйләргә өйрәнеү.
Бирелгән һорауҙарға дөрөҫ итеп яуап бирергә белеү.
Темаға ярашлы текстар төҙөй белеү.

**Мин ял итәм.**

Был темала кейектәр, ҡырағай ҡоштар тураһындағы мәғлүмәттәр үрелеп бара. Уларҙың билдәләрен, эштәрен аңлатыу эштәре алып барыла.ҡырағай йәнлектәр тураһында әкиәттәр уҡыу, өйрәнеү бара. Ҡырағай ҡоштар атамаларын өйрәнеү. Ҡайҙа, ҡасан һорауҙарына яуап биреү. З.Әхмәтйәнованың “Өҫтәл янында”, Ф.Туғыҙбаеваның “Кәкүк менән Өлфәт”, “Баш ҡала шундай матур”, А.Йәғәфәрованың “Бәләкәстәр” шиғырҙарын үҙләштереү. Ваҡыт берәмектәренең бирелешен өйрәнеү, ваҡытты башҡортса аңлата белеү. Нимә менән, нимә эшләйбеҙ һорауҙарына яуап бирә белеү. “Йәйге ялға пландарым” темаһына әңгәмәләшеү. Яңы һүҙҙәрҙе дөрөҫ һәм урынлы ҡулланырға өйрәнеү.
Башҡортостанда, үҙебеҙ йәшәгән төйәктә көҙ, ҡыш, яҙ, йәй миҙгелдәре, уларҙың билдәләре. Тәбиғәттең төрлө күренештәре. Миҙгелдәргә бәйләнешле ололарҙың эштәре, хәстәрҙәре. Миҙгелдәргә ярашлы балаларҙың эштәре, уйындары тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу, мәҡәлдәр, һынамыштар менән танышыу.

## 3 класс

**Танышыу**.

Түбән кластарҙа өйрәнелгәндәрҙе ҡабатлау, тәрәнәйтеү. Сәнғәтле һөйләшеү. Төрлө ситуацияларҙа һөйләшеү. Башҡорт теленең үҙенсәлекле өндәре һәм хәрефтәре. *Ҡайҙан* һорауы һәм шул һорауға яуап биреү. Хат яҙыу
Дәреслектәге күнегеү текстары, диалогтар, йомаҡтар.
Уҡыусыларҙың үҙҙәре һәм уҡытыусы һайлаған текстар.
К.Кинйәбулатова .Дуҫтарым күп.
З.Әхмәтйәнова. Нәби менән әбей.
Ф.Иҫәнғолов. Танышыу. Хәлдәрен беләм.

**Мәктәптә**.

Уҡыусыларҙың тема буйынса белемдәрен тәрәнәйтеү, һүҙлек запасын арттырыу. Уҡыу эшмәкәрлеге, уҡыу әсбаптары, уларҙы бөхтә тотоу. Көн режимы, таҙалыҡ, йыйнаҡлыҡ. Класта дуҫлыҡ, берҙәмлек, иман тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт телендә өндәрҙең, хәрефтәрҙең дөрөҫ әйтелеше һәм яҙылышы.
Дәреслектәге күнегеүҙәр текстары, диалогтар, кәңәштәр, көләмәстәр.
С.Әлибай. Өсөнсөләр.
Ялҡау Зилә.

**Һөнәрҙәр.**

Тема буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау, белемде тәрәнәйтеү, һөйләшеү, уҡыу күнекмәләрен артабан үҫтереү. Туғанлыҡ мөнәсәбәттәре. Һөнәр атамалары, таныш һәм яҡын кешеләрҙең шөғөл-һөнәрҙәре, уларҙың яҡшы сифаттары тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу.
Дәреслектәге күнегеүҙәр текстары, диалогтар.
Ҡушымталағы материалдар, Уҡыусыларҙың үҙҙәре һайлаған текстары.
М.Дилмөхәмәтов. Йылы һүҙ.

**Йыл миҙгелдәре.**

Башҡортостанда, үҙебеҙ йәшәгән төйәктә көҙ, ҡыш, яҙ, йәй миҙгелдәре, уларҙың билдәләре. Тәбиғәттең төрлө күренештәре. Миҙгелдәргә бәйләнешле ололарҙың эштәре, хәстәрҙәре. Миҙгелдәргә ярашлы балаларҙың эштәре, уйындары тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу, мәҡәлдәр, һынамыштар менән танышыу.
Дәреслектәге күнегеүҙәр текстары, диалогтар, йомаҡтар.
Ш.Ғәлиев. Миҙгелдәр.
Р. Солтанова. Йомарт алмағас.
Р.Әбүталипова. Тейен.
З.Ҡотлогилдина. Ҡарағат.

**Кейем-һалым**

Кейем исемдәрен үҙләштереү, элек өйрәнгәндәрҙе иҫкә төшөрөү. Кейемде һаҡлап, ҡәҙерләп тотоу, һәр берећен үҙ урынына ҡуйыу. Кейем һәм шәхси гигиена. Кейем һәм матурлыҡ, кейем һәм тыйнаҡлыҡ һ.б. тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Шиғырҙар ятлау.
Дәреслектәге күнегеүҙәр текстары, диалогтар, теләктәр, ҡотлауҙар.
Магазинда.
Г.Мөхәмәтдинова. Күлдәк
Ф.Туғыҙбаева. Минеке.

**Ғаилә**

Ғаилә ағзалары, уларҙың үҙеңә туғанлыҡ мөнәсәбәттәре. Был атамаларҙы үҙләштереү. Темаға бәйләнешле яҡындарҙың эш-шөғөлдәре, уй-хыялдары, киләсәккә пландары. Ғаилә шәжәрәһе, уның әһәмиәте хаҡында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу.
Дәреслектәге күнегеүҙәр текстары, диалогтар, теләктәр, ҡотлауҙар.
М.Баймөхәмәтова. Китәм, вәт.
С.Сурина. Кем нимәгә өйрәтә.
Р. Сөләймәнов. Йәннәт булырмы.
Н.Сәлимов.Кемдәр маладис була.
Ҡәләм кемгә булырға тейеш.
С.Әлибай. Байрам килгән.

**Тыуған көн**

Балаларҙың тыуған көн байрамы, уға әҙерлек мәшәҡәттәре. Тыуған көн бйрамын үткәреү йолаһы. Ҡунаҡтар саҡырыу, уларға хөрмәт күһәтеү, мәжлестә үҙеңде

тотоу һ.б. тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу, шиғырҙар ятлау. Итәғәтлек нормаларын үҙләштереү. Башҡорт телендәге бойороҡ, теләк һөйкәлеше формаларын практик үҙләштереү. Әҙәплелек нормаларын белдереүсе һүҙҙәр һәм һөйләмдәр.
Дәреслектәге диалогтар, күнегеү текстары, ҡотлауҙар, саҡырыуы текстары.
М.Дәүләтшина. Байрам.
Ф. Ғөбәйҙуллина. Беҙҙең дуҫ.

**Тәбиғәт**

Балаларҙың тәбиғәт тураһында белгәндәрен әйттереү, яңы темалар үтеү. Башҡортостаныбыҙҙың тәбиғәтен һаҡларға өндәү. Матурлыҡты күрергә өйрәтеү.
Дәреслектәге диалогтар, күнегеү текстары
Тәбиғәт.
Ф.Туғыҙбаева. Бер генә һүҙ.
Эш табылды.
И. Тимерханов. Ике ҡуян балаһы.
Кем батыр?

**Башҡортостан**

Башҡортостан, уның дәүләт символдары, уларҙың мәғәнәһе. Башҡорт иле, уның халҡы, тарихы, ер-һыуы. Башҡортостандың данлыҡлы урындары. Исем, яңғыҙлыҡ һәм уртаҡлыҡ исемдәрҙе практик үҙләштереү, телмәрҙә ҡулланыу.
Дәреслектәге диалогтар, күнегеү текстары, мәҡәлдәр
Башҡортостан.
Башҡортостандың байлығы.
Өфө ҡалаһы буйлап.

**Сәйәхәт.**

Сәйәхәт, уның кешегә файҙаһы, әһәмиәте, сәйәхәт урындары, йүнәлештәре, спорт һәм сынығыу тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу.
Дәреслектәге диалогтар, күнегеү текстары
Европа-Азия
Өфө урамында.
Сәфәр йөрөгөҙ-сәләмәт булырһығыҙ.
М. Хисамова. Егәрле Гөлбикә.
Р. Лотфуллина. Ялым күңелле үтә.
Ғ. Ибраһимов. Хәйлә.

**Байрамдар**.

Башҡортостанда байрамдар, уларҙың төрҙәре, әҙерлек мәшәҡәттәре. Башҡорт халҡының милли байрамдары тураһында һөйләшеүҙәр, текстар уҡыу. Предметтың билдәләрен, уларҙың сағыштырыу формаларын практик үҙләштереү. Телмәр күнекмәләрен камиллаштырыу.

Дәреслектәге диалогтар, күнегеү текстары
Ф. Ғөбәйҙуллина. Алъяпҡыс тектем.
Г. Юнысова. Ҡәҙерле байрам.
С. Галин. Байрамдар.
Д. Исламов. Һабантуй.
Ҡарға бутҡаһы.
Ф. Ғөбәйҙуллина. Башҡортостан флагы.
Ф. Туғыҙбаева. Һаумы, йәй.

**4класс**

Көн дә мәктәпкә барам.

Бөтә балалар өсөн ҙур байрам – 1 сентябрь, уҡыу, йәйге каникул, белем көнө, класс, ундағы уҡыусылар, уларҙың эштәре тураһында һөйләшеүҙәр, әҫәрҙәр уҡыу. Башҡорт теленең өндәре һәм хәрефтәре. Темаға ҡараған һүҙ байлығын арттырыу.

Мин ғаиләмде яратам.

Ғаилә ағзалары, уларҙың эш-шөғөлдәре. Ололарҙың һәм балаларҙың хеҙмәте. Һөнәрҙәр төрлө, уларҙың һәр береһе лә кәрәкле. Һөнәр һайлау. Башҡорт телендә сифат. Сифаттың башҡорт телендә бирелеше һәм ҡулланылышын өйрәнеү.

Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем.

Башҡортостан ерендәге, Өфө ҡалаһындағы иҫтәлекле урындар менән таныштырыу. Башҡортостандағы данлыҡлы уҡыу урындары, сәнғәт һарайҙары. Уларға ҡыҫҡаса характеристика биреү. Тыуған төйәктең матурлығын күрһәтеү, әһәмиәтен асыу буйынса әңгәмәләр үткәреү, текстар уҡыу. Башҡорт телендә алмаштарҙың бирелешен уҡыусыларға еткереү.

Ауылда / ҡалала йәшәйем.

Башҡортостандағы ауыл, ҡалаларҙағы тормош менән таныштырыу. Башҡортостан тарихында, уның бөгөнгө тормошонда күренекле шәхестәрҙең әһәмиәте бик ҙур. Күренекле шәхестәр рәтенә яҙыусылар менән артистар ғына түгел, ә йәмәғәт эшмәкәрҙәре лә, спортсылар ҙа, нефтселәр ҙә, ауыл эшсәндәре лә инә. Ауыл тормошо, ауыл кешеләренең көнкүреше, эш-шөғөлдәре.

Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ.

Башҡортостандағы йыл миҙгелдәренең үҙенсәлектәре тураһында мәғлүмәт биреү. Йыл миҙгелдәренең йәнлектәр, бөжәктәр донъяһына йоғонтоһо тураһында күҙәтеүҙәр үткәреү, текстар үҙләштереү. Һауа торошона бәйле төрлө халыҡ һынамыштарын, йомаҡтар, мәҡәлдәрҙе өйрәнеү. "Ҡыҙыл китап"тың әһәмиәтен аңлатыу. Йыл миҙгелдәренә бәйле башҡорт халкы байрамдарын өйрәнеү. Башҡорт телендә рәүештәрҙең бирелешен һәм ҡулланылышын өйрәтеү.

Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ.

"Минең тормошомдағы ҡыҙыҡлы хәлдәр", "Минең хыялым", "Минең кумирҙарым" темаһына әңгәмәләр ҡороу. Ф.Туғыҙбаеваның "Искәндәрҙе кем уятты?" тексын өйрәнеү. Ҡылымдың юҡлыҡ формаһының, зат менән үҙгәрешенең бирелешен үҙләштереү.

Һатып алырға өйрәнәм.

"Минең бюджет", "Мин кейем һатып алам" , "Мин модалы кейем яратам", "Бүләк һайлайым" темаларына әңгәмәләр ҡороу, фекер алышыу, диалогтар өйрәнеү. Кейем-һалымдың барлыҡҡа килеү тарихын байҡау. Бүләк һайлау нескәлектәрен өйрәнеү. Ҡылымдарҙың заман менән үҙгәрешен үҙләштереү.

**Тематическое планирование с указанием количества часов, отводимых на освоение каждой темы**

2 класс

| № п/п | Наименование разделов/тем | Количество часов, отводимых на изучение темы |
|---|---|---|
| 1 | Тыуған Башҡортостан. | 2 |
| 2 | Башҡорт теле . | 4 |
| 3 | Һаумы, мәктәп! | 3 |
| 4 | Тән өлөштәре. | 1 |
| 5 | Минең ғаиләм. | 5 |
| 6 | Мин нимә яратам | 3 |
| 7 | Минең мәктәбем | 1 |
| 8 | Минең класым | 1 |
| 9 | Мин мәктәпкә йыйынам | 2 |
| 10 | Мин мәктәптә | 1 |
| 11 | Мин дәрестән сыҡтым | 4 |
| 12 | Минең уйынсыҡтарым | 5 |
| 13 | Мин уйнарға яратам | 3 |
| 14 | Мин уйнарға сығам | 3 |

| | | |
|---|---|---|
| 15 | Мин уйнарға сыҡтым | 1 |
| 16 | Минең кескәйдуҫтарым | 6 |
| 17 | Мин ял итәм | 25 |
| | итого | 70 |

3 класс

| № п/п | Наименование разделов/тем | Количество часов, отводимых на изучение темы |
|---|---|---|
| 1 | Танышыу | 7 |
| 2 | Мәктәптә | 9 |
| 3 | Һөнәрҙәр | 4 |
| 4 | Йыл миҙгелдәре | 8 |
| 5 | Кейем-һалым | 7 |
| 6 | Ғаилә | 3 |
| 7 | Тыуған көн | 3 |
| 8 | Тәбиғәт | 8 |
| 9 | Башҡортостан | 3 |
| 10 | Сәйәхәт | 7 |
| 11 | Байрамдар | 11 |
| | Итого | 70 |

4 класс

| № п/п | Наименование разделов/тем | Количество часов, отводимых на изучение темы |
|---|---|---|
| 1 | Көн дә мәктәпкә барам | 11 |
| 2 | Мин ғаиләмде яратам | 8 |
| 3 | Үҙем йәшәгән ер тураһында һөйләйем | 9 |
| 4 | Ауылда/ҡалала йәшәйем | 10 |
| 5 | Йыл миҙгелдәре һәм һауа торошо тураһында һөйләшәбеҙ | 11 |
| 6 | Төрлө хәлдәр тураһында һөйләшәбеҙ | 7 |
| 7 | Һатып алырға өйрәнәм | 14 |
| | Итого | 70 |